# ҺҮҘ — ЕТӘКСЕЛӘРГӘ

## Белем шишмәләре һайыкмаһын

*Хәлит Сөләймәнов,*
*кала-район хакимиәте башлығы*
*урынбаҫары:*

Мәғариф районыбыҙ тарихында үҙәк урынды биләй. Сөнки мәҙәниәт үҙәге булып рәсми рәүештә китапхана һаналһа ла, асылда барыбер был йөктө мәктәп күтәрә. Ниндәй генә эш, байрам булмаһын, уны һәр саҡ уҡытыусылар башлап йөрөй. Әгәр мәктәптә педагогтар коллективы көслө икән, тимәк, ул ауылда тәртип тә ныҡ була.

Әлегерәк производство булһа, ауыл да йәшәй, ти торғайныҡ. Ә бит мәктәп булмаһа, ауыл халҡы ла күсеп китә. Мәҫәлән, Иҫәндә мәктәп асҡайныҡ, ауыл да ҙурайҙы. Монасипта тиҙҙән тулы булмаған урта мәктәп асырға йыйынабыҙ. Унда хәҙер теплица хужалығы төҙөргә самалайҙар. Тимәк, ауыл үҫәсәк.

Бөгөн мәғарифыбыҙ үҫеш юлында һәм аяғында ныҡ баҫып тора. Балалар баҡсалары эшләй, кадрҙар мәсьәләһе ыңғай хәл ителә. Әле Әбделкәрим ауылында балалар баҡсаһы төҙөлөп бөтөү алдында. Планда тағы дүрт мәктәп асыу ҡаралған.

Йыл һайын юғары уҡыу йорттарына инеүсе уҡыусыларыбыҙ һаны арта. Былтыр 200 бала юғары уҡыу йортона инһә, быйыл 293-кә етте. Был да үҙенә күрә үҫештең бер күрһәткесе. Программала һәр ауыл мәктәбендә 5, ә ҡала мәктәбендә 10 компьютер булырға тейешлеге ҡаралған һәм республика хөкүмәте тарафынан бының өсөн тейешле сумма бүленгән.

Мәғарифтың киләсәге өмөтлө. Әммә уҡытыусыларыбыҙ социаль яҡлауға мохтаж. Беҙ һуңғы осорҙа эш хаҡын ваҡытында түләй башланыҡ. Шулай ҙа эш хаҡы бик түбән, шунлыҡтан уҡытыусыларҙың күпселеге төшөмлөрәк эшкә күсеү яғын ҡарай. Был мәсьәлә Рәсәй кимәлендә хәл ителергә тейеш. Шул саҡта ғына мәғарифыбыҙ киләсәктә лә үҫешен дауам итер.

## Маҡтанырға хаҡыбыҙ бар

*Луиза Дәүләтшина,*
*кала-район хакимиәтенең*
*мәҙәниәт идаралығы начальнигы:*

Маҡтанаһы түгел, башҡорт мәҙәниәт сылбыры ғәмәлдә Урал аръяғы ынйыларынан теҙелгән. 20-се йылдарҙа уҡ Баймаҡта, Темәстә, Түбәлә, Беренсе Этҡолда драма түңәрәктәре эшләй башлай. Башҡорт теләндә спектаклдәр ҡуйыла. Мирхәйҙәр Фәйзи, Сәғит Мифтахов кеүек күренекле драматургтарҙы, Һәҙиә Дәүләтшина, Сәләх Кулибай, Батыр Вәлид кеүек әҙиптәрҙе, Ғиниәт Ушанов, Ғата Сөләймәнов, Хәмит Әхмәтов, Ғәшиә Абыҙгилдина, Ғәшүрә Ирназарова кеүек мәшһүр ҡурайсы һәм сәхнә оҫталарын ошо төбәк тәү башлап тәрбиәләгән. Баймаҡтар композитор Хөсәйен Әхмәтов менән хаҡлы ғорурлана.

1923 йылда Темәстән Зәки Вәлидиҙең дуҫы Әбүбәкир Хөсәйенов, үҙ ғаиләһе менән Мәскәү күргәҙмәһенә тирмә алып барып ҡороп, башҡорт йолаһын бик сағыу күрһәтеп ҡайта. Уның менән бергә барған Хәмит Әхмәтовтың ҡурай моңон мәскәүҙәр таң ҡалып тыңлай.

Бөгөн районда мәҙәниәт ярайһы уҡ юғары кимәлдә тип әйтергә мөмкин. Халыҡтан сыҡҡан йырсыларыбыҙ, ҡурайсыларыбыҙ, бейеүселәребеҙ, төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашып, еңеү яулап, дан-шөһрәткә күмелеп ҡайта. Буранбайҙан Хәбир Раев менән Фәнүр Аралбаев Нефтекамала үткәрелгән «Дуҫлыҡ моңо» фестивалендә дан ҡаҙандылар. Ошо уҡ ауылдан уҡыусы Марсель Ҡотоев Өфөлә үткән «Башҡортостан йондоҙҙары» республика конкурсында Гран-при яуланы. Баймаҡтан буласаҡ сәхнә йондоҙо Рафаэль Сәғитов та, ошо конкурста

бейеү номинацияһында Гран-при алып, алда һанап үтелгән йырсыларҙан ҡалышманы. Бына ошондай йәш талантар киләсәккә өмөтөбөҙ беҙҙең.

Былтыр йәй Байыш ауылынан оҫта ҡурайсы һәм йырсы Ташбулат Дәүләтшин Япония сәхнәһендә сығыш яһап, тамашасыларҙы башҡорттоң сихри моңо менән арбап ҡайтты.

Үлән үҫкән ерендә үҫә, тиҙәр. Бәрәкәтле Баймаҡ ере әҙәбиәткә һәм мәҙәниәткә сағыу исемдәрҙе биреү өҫтөндә.

## Һыр бирмәҫ йылайырҙар

*М.Камалеев,*
*«Йылайыр» совхоз-техникумы директоры урынбаҫары:*

Ленин орденлы «Йылайыр» совхоз-техникумы баштан уҡ Баймаҡ игенселәренең данын күтәреүҙә баһалап бөткөһөҙ роль уйнаны. Әле лә дәүләткә иң күп икмәк һатыусы район карауайында йылайырҙарҙың өлөшө иң тосо.

1986 йылда иген баҫыуҙары биләгән 31300 гектарҙың һәр берәһенән 28,9 центнер итеп йыйып алынды. Тулайым уңыш 90600 тонна тәшкил итте, шуның 64093 тоннаһы дәүләткә һатылды. 1992 йылда гектар ҡеүәте 29,4 центнерға барып баҫты. Хужалыҡтан өс Социалистик Хеҙмәт Геройы, утыҙ Ленин ордены кавалеры сыҡты. В.С.Солонин, Ә.Р.Нәкиев, Р.Х.Яхиндарҙың исеме район тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған.

1984 йылдың апрелендә хужалыҡ Баймаҡ ауыл хужалығы техникумы менән берләшә һәм совхоз-техникум статусы ала. Шул осорҙан алып ул райондың кадрҙар әҙерләү мәктәбенә әүерелде. Хәҙер ҡайһы ғына хужалыҡҡа барма, бөтә тармаҡтарҙа ла беҙҙә һөнәр алған белгестәр эшләй.

Республикалағы һәм Рәсәйҙәге иң ҙурҙарҙан һаналған хужалыҡ үҙгәртеп ҡороу елдәренә бирешмәй бөгөнгө көндә лә тоторoҡло эшләп килә.  Әле хужалыҡтың бөтә тармаҡтарында ла баланс ыңғай. Баҙар иҡтисады шарттарында табыш — производство-хужалыҡ эшмәкәрлегенең төп күрһәткесе. Былтырғы үтә ҡатмарлы шарттарҙа 34690 тонна иген йыйып алдыҡ. Ун айҙа 5950 центнер ит, 36690 центнер һөт етештерелде.

Киләсәктә совхоз-техникум ҙур хужалыҡтан фермаларҙа, баҫыуҙарҙа етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеүсе ҡеүәтле агросәнәғәт предприятиеһына әүерелергә тейеш.

Хәҙер Күмертауҙан алынған ЛПГ-3 ҡарабойҙай әрсеү линияһы ҡорола. Ул бер йылда 180-200 тонна ярма сығарыуға иҫәпләнгән. Һөттө пастеризациялау һәм пакетлау линияһы, Новгородтан МВС-2 тирмәненең ҡоролмаларын алып ҡайттыҡ. Ул йыл әйләнәһенә 8000 тонна бойҙай тартырға мөмкинлек бирәсәк. Иҫәпләүҙәр күрһәтеүенсә, 5 миллион һумға төшкән тирмән хаҡы 9 айҙа тулыһынса кире ҡайтарыласаҡ. Шулай уҡ макарон ризыҡтары сығарыуҙы ла көҙ уңында тотабыҙ.

## Яңы шарттарҙа

*Наталья Ғәлина,*
*Баймак машиналар эшләү заводының иктисад бүлеге начальнигы:*

Баймаҡта баҡыр иретеү заводының эшләй башлауы 1913 йылға барып тоташа. Илебеҙ кисергән йылдар шандауҙары уны ла урап үтмәй. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бында, нисек кенә ауыр булмаһын, оборона ихтыяждары өсөн баҡыр иретелә.

1957 йылда завод базаһында яңы предприятие — машиналар эшләү заводы асыла. Бына шул ваҡыттан алып   производство үҫә, яңы цехтар төҙөлә, продукция етештереү арта.

Ләкин баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү осоро уның иҡтисадына ла кире йоғонто яһамай ҡалмай. Предприятиены нисек тә һаҡлап алып ҡалыу маҡсаты менән завод етәкселәре, ҡала-район хакимиәте эҙләнеүҙәр алып бара һәм «Инвестпромко» йәмғиәтенә мөрәжәғәт итә. Тиҙҙән предприятие «Баймаҡ машзаводы» асыҡ акционерҙар йәмғиәте булараҡ теркәлде һәм яңы статус алды. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне — бөгөн завод әкренләп тотороҡло эшләүселәр рәтенә баҫа.

Әле төп техник-иҡтисади күрһәткестәр буйынса предприятиела үҫеш күҙәтелә. Быға заводты үҙгәртеп ҡороу программаһын тейешенсә үтәү, маркетинг хеҙмәтен әүҙемләштереү, матди-техник йәһәттән байытыу, хужалыҡ итеүҙең яңы алымдарын ҡулланыу булышлыҡ итә. Ошо осорҙа (1999-2000 йылдарҙа) металл конструкциялары участкаһы базаһында насостар йыйыу цехы булдырылды һәм төп заказсыға тәүге партия оҙатылды. Әйткәндәй, продукция юғары баһа алды. Быйыл бөтәһе 2 млн һумлыҡ 20 насос йыйыу планлаштырыла.

Магнитогорск тау-металлургия академияһы менән берлектә бында яңы төр иретмәләрҙе үҙләштереү эштәре алып барылғайны. Һөҙөмтәлә өҫтәмә рәүештә 5 млн һумға заявкалар алыу мөмкинлеге тыуҙы.

Инструменталь цех үҙенең тәүге продукцияһын сығара башланы.

«Инвестпромко» компанияһы линияһы буйынса килтерелгән яңы ҡоролмалар ярҙамында сифатлы продукция сығарыу күҙ уңында тотола. Инвесторҙар шулай уҡ завод лабораторияһын заман талаптарына яуап бирерлек итеп йыһазландырмаҡсы.

«БМЗ» акционерҙар йәмғиәтенең киләсәккә пландары тураһында һөйләгәндә, бында иң элек металл ҡойоу цехына капиталь ремонт үткәреү һәм уның ҡоролмаларын яңыртыу, бәләкәй металл ҡойоу цехын сафҡа ебәреү, йылына 150-200 агрегат ҡеүәтле насостарҙы йыйыу участкаһын эшкә ҡушыу, металл ҡойоу цехын газ яғыулығына көйләү күҙ уңында тотола.

Шулай итеп, «Инвестпромко» ябыҡ акционерҙар йәмғиәте ярҙамында машиналар заводы яңы шарттарҙа эшләүгә күсте.

## *Данлы төбәк инек...*

*Рафаэль Рахманғолов,*
*Түбә ҡасаба советы депутаты:*

Түбә ҡасабаһы ҡасандыр көслө сәнәғәт тармағы булған үҙәктәрҙән һаналды. Бында заманында рудник уңышлы эшләп килде, уның продукцияһы илебеҙҙең төрлө тарафтарына оҙатылды. Шул йылдарҙа эшселәр һаны ла арта. Ләкин йылдар үтә килә руда запастарының ҡырҡа кәмеүе һәм производствоның килемһеҙ булыуы сәбәпле Түбә рудниғын ябырға мәжбүр булдылар. Уға «алмашҡа» 1986 йылда тимер изделиелары заводы асылды. Шул йылдарҙа тағы бер предприятие — тегеү фабрикаһы тәүге продукцияһын бирә башланы.

Заводты беренсе көндәрҙән етәкләгән А.Иҫәнбаев яңы производствоны аяҡҡа баҫтырыу өсөн күп көс һалды. Ул осорҙа бында төрлө йоҙаҡтар, шарнирҙар, ишек биктәре, черепица һ.б. етештерелде. 80-се йылдар аҙағына ҡәҙәр предприятие иҡтисади тотороҡло булды. Әммә Өфөнөң «Металлист» берекмәһенә күсерелеү менән заводтың эшмәкәрлеге күҙгә күренеп кире тәгәрәй башланы — өҫтән производствоны үҫтереүгә аҡса бүленмәне, реконструкция эштәре үткәрергә мөмкинлек булманы.

Илдәге үҙгәртеп ҡороуҙар хәлде тағы ла ҡатмарлаштырҙы. Иҡтисади реформалар йылдарында был айырыуса нык күҙәтелде.

Әммә, тормош һәр нәмәне үҙ урынына ҡуя, тигәндәй, бөгөн заводта ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә. Яңы етәксе тәғәйенләнеү менән предприятие икенсе һулышын кисерә. Магнитогорск ҡалаһының «Вита» фирмаһы менән әүҙем хеҙмәттәшлек итеп, предприятие хосусилаштырылды һәм акционерҙар йәмғиәте булып китте. Белеүебеҙсә, унда яңы продукциялар етештерелә башланы, производство биналарына ремонт яһалды.

Заводтың элекке хеҙмәткәре һәм хеҙмәт ветераны булараҡ, шуны әйтергә кәрәк: предприятие әле аяҡҡа баҫыу осорон кисерә. Етәкселектең яңы төр тауар етештереү, партнерлыҡ һәм һатыу баҙарын киңерәк үҙләштереү маҡсатында алып барған эшмәкәрлеге быға асыҡ миҫал.